30 ғинуар 2014 йыл

# ЙӘЙҒОР

№ 1 (40)

Ҡасим Дәүләткилдеев исемендәге республика һынлы сәнғәт гимназия-интернаты гәзите




## Яңы йыл кисәһе

Яңы йыл – иң матур,ҡыштың иң йылы байрамы. Һәр кем, олоһы ла,кесеһе лә уны түҙемһеҙлек менән көтөп ала, ниндәйҙер мөғжизәләр көтә.

27 декабрҙә үткән байрам бөтәһе өсөн дә ҡыҙыҡлы, иҫтәлекле булып хәтерҙә ҡалды.

Кисәгә һәр класс үҙ бүләген -әкиәтен әҙерләп килде. Һәр әкиәт үҙенсә матур, күңелле, үҙенсәлекле булһа ла, айырым рәүештә оҫта, бай, яңылыҡтар индергән әкиәттәр айырылып торҙо. Жюри ағзаларына « артистарҙы» «хөкөм» итеүе еңел булманы, хатта бәхәсле лә булды шикелле. Шулай итеп 1-се урын 6А классы «Репка», 2-се урын 7В классы «Иванушка», 3-сө урын 6Б классы «Колобок» лайыҡ булды.

Ә өлкән класс уҡыусылары араһында 1-се урын 10А классы «Аленький цветочек», 2-се урын 10Б классы «Три поросёнка», 3-сө урын 11А классы «Колобок» лайыҡлы урын алдылар.

Уҡыусылар әҙерләгән костюмдар ҙа жюри тарафынан юғары баһаланды.

*Эльмира Дәминдәрова, 9Б классы укыусыһы*



# Преемственность новизны

Когда-то, когда не было ещё миллионного города под именем Уфа, на высоких берегах слияния больших рек росли, строились и развивались два небольших города: Уфа в южной части и Черниковск в северной. В те далёкие времена приехал в Уфу молодой человек (в будущем большой художник – Борис Фёдорович Домашников) и снял угол в одноэтажном деревянном доме на берегу реки Белой с видом на высокий берег, усыпанный деревянными домами и возвышающимися куполами церквей и шпилями мечетей город Уфу. Там, на высоком берегу стояли дома художников Михаила Нестерова, Касима Давлеткильдеева, писателя С.Т.Аксакова. Духовная жизнь города развивалась: в парке играл духовой оркестр, существовал даже летний театр, размещавшийся в ажурном, редкой архитектуры, деревянном здании. Это было в те далёкие времена, когда духовная жизнь народов, населяющих Россию и в частности Башкортостан, подчинялась незыблемым законам духовности, направленных на нравственную чистоту человечества. И, несмотря на историческую борьбу с религией, церкви, оставшиеся и избежавшие разрушения, привлекали взор отражением солнечных бликов и были самыми высокими в городе, но и в душах некоторой части человечества.

Душа пела и у молодого художника, преобразовываясь в ликующее многоцветие живописных масляных полотен, передающих всё то, что окружало художника, пытливо вглядывающегося, изучающего и отражающего в своём творчестве будоражащую душу, быстро меняющуюся действительность.

Время преподносило новое. У художника родился сын. Города Уфа и Черниковск соединила в единый город трамвайная линия, которая стала основой проспекта Октября. Город строился и в ширину, и в высоту.

Но растёт и новое поколение, развивается и совершенствует себя, стремясь к проявлению совершенства бытия через совершенство сознания. Так, трёхлетний сын того художника, по-новому взглянув на творческие плоды отца, решил дописать недописанный холст и масляными красками проявил дерзания своего сознания, усовершенствовал произведение отца-художника. Новое увидело жизнь по-новому и по-новому передало увиденное.

Вырос сын, тоже стал художником. Увеличились размеры картин, но трепетания юной души всё ищут и ищут ответа в вечных вопросах духовности, через произведения искусства, лейтмотивом которых являются вариации познания на темы, объединяющие светлые устремления сознания с вечными поисками возрождения души и тела.

И, сохраняя преемственность вечного во времени, пришло поколение с опытом к новому, но уже вставшему на стезю искусства. Такая творческая встреча художника - члена творческого Союза художников Республики Башкортостан, члена творческого Союз художников России, Международной Федерации художников ЮНЕСКО Виктора Борисовича Домашникова с учащимися прошла в стенах ГБОУ РХГИ им. К.А.Давлеткильдеева в рамках недели изобразительного искусства.

Эта встреча-беседа, думается, нужна была всем. Художнику, чтобы подвести черту, сделать остановку, осмыслить и пойти дальше. Учащимся – осознать, понять и принять новое: художественный и человеческий опыт, затем задуматься о малом и большом, мимолётном и вечном, ценном и бесценном… Поискать и найти. Мы мыслим, поэтому мы живём.

В стенах гимназии в XXI веке нашли своё новое, но постоянное место экспозиции скульптурные работы XX века народного художник БАССР З.Р. Басырова.

Продолжая начатый почин, возможно, пришло время новому – поддержки инициативы по созданию музея Бориса Фёдоровича Домашникова, который первым в Башкирии получил звания Народный художник СССР и члена-корреспондента Академии художеств России.

Чтобы было место, где можно было бы поговорить самим с собой, понять прошлое, чтобы лучше осознать настоящее, совместить всё в своём сердце, душе и уме, чтобы задуматься и принять, чтобы помнить, чтобы уметь любить старое по-новому, новое – по-старому, возвращаясь преемственно к вечной истине: «Красота спасёт Мир!»

*Светлана Валентиновна Воловникова,*
*учитель ИЗО предметов*

## Уҡыусылар ижады

**Ҡыш ҡайҙан килә беҙгә?**

Ғүмерем буйы уйландым
Ҡыш ҡайҙан килә беҙгә?
Ҡыш бабай ҡайҙан килә
Ҡарһылыу менән бергә?
Ҡар бөртөктәре ҡайҙан?
Шуныһы бер мөғжизә.
Бурандар нимәгә кәрәк?
Бына ниндәй мөғжизә!
Һауала ай нисек тыуа
Ҡояшы нисек сыға
Тәбиғәт бик тымсымлы шул
Аңлап бөтмәҫһең быны.

*Заһиҙә Заманова ,*
*6А класс уҡыусыһы*

**Әсәй!**

Әсәй,һин китһәң мин үкһеп илармын бит
Һинһеҙ йәшәй белмәйем мин
Ауыр һүҙҙәр әйтеп үпкәләттем
Ғәфү итсе әсәй, үкенәмен.
Аңлайым мин һине әсәйем
Өләсәйем “киткән ” көндө хәтерләйем,
Һине йыуатырҙай көс тапманым,
Үҙ-үҙемде хәҙер битәрләйем.
Мин яратам һине әсәкәйем,
Китмә беҙҙән бер саҡ, ебәрмәйем,
Насарлыҡтар эшләмәмен берҙә
Ышан әсәкәйем, ышан миңә.

*Наҙгөл Баймөхәмәтова,*
*6А класы уҡыусыһы*

# Каникулдар нисек үтте?

Беҙҙең уҡыусыларыбыҙ ҡышҡы ялды нисек үткәрҙе икән, ошо һорау менән 7А һәм 7Б класы уҡыусыларына мөрәжәғәт иттек.

***Нәркәс Баһаутдинова 7А класы уҡыусыһы:***

- Мин ҡышҡы каникулымды бик күңелле һәм файҙалы үткәрҙем. Көн һайын саңғыла һәм конькиҙа йөрөнөм. Әсәйемә ҡар көрәргә ярҙам иттем, һүрәттәр төшөрҙөм, китаптар уҡыным, күңелле итеп яңы йылды ҡаршыланым, бигерәктә төрлө төҫтәге салюттарҙы күҙәтеүе ҡыҙыҡ булды.

***Диана Вәлеева 7А класы уҡыусыһы:***

- Ҡышҡы ялымда Йылайыр районы Байғужа ауылында булдым. Өйҙә әсәйемә булыштым. Раушания тигән апайымдың тыуған көнөнә барҙым, беҙ уға изге теләктәр теләп тыуған көнө менән ҡотланыҡ. Буш ваҡыттарымда һеңлеләрем, ҡустыларым менән саф һауала саңғы шыуҙым, оҙаҡ күрмәгән дуҫтарымды күреп ҡыуандым. Хайбулла районы Бүребай ауылында йәшәүсе өләсәйем менән ҡартатайымдың хәлдәрен белеп уларҙың йорт эштәрендә ярҙам итешеп килдек.

***Алһыу Мәхмутова 7А класы уҡыусыһы:***

- Каникул бик яҡшы үтте, яңы йылды бөтә ғаиләм менән Магнитагорск ҡалаһында ҡаршыланыҡ, ул көндө салют ҡараныҡ һәм тауҙан шыуҙыҡ. Иртәгәһенә Әбйәлил районы Биҡҡол ауылындағы өләсәй менән олатайҙарға барҙыҡ. Өләсәйем манты, бишбармаҡ менән һыйланы. Ауылда ҡустымды саңғыла шыуырға өйрәттем.

***Вилдан Батыршин 7А классы уҡыусыһы:***

- Миәкә районы Өршәк ауылындағы өләсәйемдә каникулымды уҙғарҙым, рәхәтләнеп йоҡо туйҙырҙым. Өләсәйемә йорт тирәһендә ярҙам итештем.

***Дилара Шәрипҡолова 7А класы уҡыусыһы:***

- Мин ҡышҡы каникулды Әлшәй районының Раевка ауылында булдым. Көн дә тейерлек тауҙа шыуҙым, саңғыла, конькиҙа йөрөнөм. Ринат туғанымды уҡырға өйрәттем, уға әле 6 йәш. Буш ваҡыттарымда китаптар уҡыным, һүрәт төшөрҙем, дуҫтарым менән осраштым.

***Руслан Әбсәләмов 7А класы уҡыусыһы:***

- Мин Йылайыр районының Йылайыр ауылында ял иттем. Көн һайын мунса индем,саңғыла шыуҙым. Атайымдың машинаһын йөрөтөп ҡараным, миңә ныҡ оҡшаны.

***Элиза Рәжәпова 7Б класы уҡыусыһы:***

- Кушнаренко районы Баҡай ауылында ял иттем. Мин унда Эвелина һеңлем менән уйнаным, әсәйемә булыштым. Ҡара ғына һарыҡ бәрәсен ҡараным, был бәрәс мин ауылга ҡайтҡан көндө төнөн тыуҙы, Катюша тип исем ҡуштым. Сөнки, минең элек бер бәрәсем бар ине уның исеме Катюша булды , ҡыҙғаныста ҡаршы уны урманда эттәр ашаны, шул бәрәскә оҡшап торғас ошо исемде бирҙем. Бер әхирәтем менән яңы йыл кисәһенә барҙым,беҙ унда төрлө уйындар уйнаныҡ, һәм бүләктәр алдыҡ. Ауылда бер апайҙарға һеңлем менән ҡунаҡҡа барҙыҡ, ул беҙгә бесәй балаһы бүләк итте.Бесәйгә һеңлем менән Беби тип исем ҡуштыҡ. Шулай уҡ ауылдан Өфөгә килгәс әхирәтем менән киноға барҙыҡ. Миңә ҡышҡы ял ныҡ оҡшаны.

*Өлкән вожатый*
*Гүзәл Сәлихова әңгәмәләште*

# Космические фантазии

11 декабря в нашей гимназии на 3 этаже открылась выставка итоговых работ 9 В класса «Космические фантазии». Работы выполнены в технике граттаж. К своим произведениям искусства юные художники подошли индивидуально. Каждый рисунок по-своему прелестен.

Благодаря Салиховой Расиме Файзулловне я и одноклассники из моей группы познакомились с интересной техникой граттаж. Учительница подала нам эту идею и заинтересовала нас. Выполнить в необычной технике итоговые работы - это что-то новое. И мы с энтузиазмом преступили к выполнению работ. Как и ожидалось, этот процесс доставил нам приятные впечатления и эмоции. Вначале, как и полагается, показывали свои эскизы. У каждого были интересные идеи. И среди несколько эскизов мы все вместе выбирали один, потом его переносили на большой формат. Мы на чистую или на покрытую краской бумагу покрывали свечкой, позже черной гуашью. Когда бумага высыхала, начинали на ней выцарапывать. Работать в этой технике - большое удовольствие.

Во время этого процесса в классе царила творческая атмосфера. Каждый с вдохновеньем вырисовывал детали на своей композиции, применял разные штрихи, способы выцарапывания на бумаге. Некоторые ученики заканчивали свою работу раньше времени, и тут же приходили на помочь другим. Чувствовалось дружелюбие нашей группы.

Я решила изобразить танцующих звездных девушек. Их образ появился в моей голове внезапно, легко. Я представила, как две девушки, созданные из скопления звезд, танцуют в небе. Как они плавно передвигаются в космосе, медленно исчезая из виду и вновь появляясь. Я уже представила их танец и продумала все до мелочей и с удовольствием воплотила все свои представления, фантазии на картине. Думаю, мне удалось воплотить свой замысел.

***Аида Баянова,***
***ученица 9В класса***








## Ҡотлайбыҙ!

Беҙҙең гимназиябыҙҙа башҡорт теле буйынса Республика олимпиадаһы үтте, был сарала Рәхимғолова Ләйсән 9Б, Мөләкова Айзилә 10 А, Хәдисов Вадим актив ҡатнашты. Яҡшы һөҙөмтәләр күрһәткәндәре өсөн Рәхимғолова Ләйсән Мәғариф министырлығының Маҡтау грамотаһына лайыҡ булды, ә Мөләкова Айзилә 3-сө урын яуланы.

***Башҡорт теле уҡытыусыһы***
***Ғәзизова Әклимә Сәфәрғәли ҡыҙы***

Гәзит 2000 йылдан башлап нәшер ителә
Тиражы: 25 экз.

Мөхәрриәт:
Мөләкова А., Даминдарова Э.
Баш мөхәррир урынбаҫары:
Сәлихова Гүзәл Әхәт ҡыҙы

Баш мөхәррир:
Хакимйәнова Венера Салауат ҡыҙы
Верстка, дизайн:
Радионов Артур Иванович